МУНИЦИПАЛЬНОЕ ОБЩЕОБРАЗОВАТЕЛЬНОЕ БЮДЖЕТНОЕ УЧРЕЖДЕНИЕ СРЕДНЯЯ ОБЩЕОБРАЗОВАТЕЛЬНАЯ ШКОЛА С.БИЛЯЛОВО МР БАЙМАКСКИЙ РАЙОН РЕСПУБЛИКИ БАШКОРТОСТАН

| РАССМОТРЕНО | СОГЛАСОВАНО | УТВЕРЖДЕНО |
| --- | --- | --- |
| На заседании ШМО учителей | Зам.директора по УВР | Директор школы |
| _____/ З.Ф. Гумерова/ | _____/ М.М. Мавлютова/ | _____/ А.И. Аминев/ |
| Протокол №1 от «14» августа 2023 г. | «18» августа 2023 г. | приказ №62 от «21» августа 2023 г. |

МОБУ СОШ с. Билялово

# РАБОЧАЯ ПРОГРАММА

**по родному (башкирский) языку на уровне общего образования разработана на основе Примерной программы по родному языку для 5 – 9 классов под редакцией З.М. Габитова (2022 г.)**

Программу составил учитель башкирского языка и литературы Гумерова З.Ф.

Билялово – 2023 г.

## Аңлатма яҙыу

Туған (башҡорт) тел буйынса эш программаһы Рәсәй Федерацияһының 2012 йылдың 29 декабренән N273-ФЗ "Рәсәй Федерацияһында мәғариф тураһында" Федераль законына, Башҡортостан Республикаһының 2013 йылдың 1 июленән №696-з "Башҡортостан Республикаһында мәғариф тураһында"ғы Законына, «Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында» Башҡортостан Республикаһы Законына (21.01.99), Башҡортостан Республикаһында Милли мәғарифты үҫтереү концепцияһына, Федераль дәүләт стандарттары положениеһына, уҡытыу туған (башҡорт) телдә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 5-11 кластары өсөн "Башҡорт теле" предметы буйынса белем биреү өлгө программаларына (авт.-төҙ.: З. М. Ғәбитова. – Өфө: Китап, 2017) таянып эшләнде.

Башҡорт телен уҡытыу маҡсаттары:

**1)** туған телгә ҡарата һөйөү, мәҙәниәт күренеше булараҡ, телгә ҡарата аңлы ҡараш тәрбиәләү; туған телдең төп аралашыу, кеше эшмәкәрлегенең төрлө сфераһынан белем алыу ҡоралы булыуын, йәмғиәттә ҡабул ителгән әхлаҡ-этик нормаларҙы үҙләштереү сараһы булыуын аңлау; туған телдең эстетик ҡиммәттәрен үҙләштереү;

2) көндәлек тормошта һәм уҡыу эшмәкәрлегендә туған телде аралашыу сараһы булараҡ үҙләштереү; үҙ-ара аңлашыу һәм үҙ-ара фекер алышыуға һәләтлелекте үҫтереү; үҙ телмәреңде камиллаштырыу; мөһим төп уҡыу белемен һәм универсаль уҡыу хәрәкәттәрен (эшмәкәрлек маҡсаттарын аныҡ итеп әйтә белеү, уны планлаштырыу, библиографик эҙләнеү үткәреү, төрлө типтағы лингвистик һүҙлектәрҙән, сығанаҡтарҙан, Интернеттан тейешле мәғлүмәтте алыу һәм эшкәртеү һ. б.) үҙләштереү;

3) тел системаһы төҙөлөшөн һәм уның хәрәкәттә булыу законлығын үҙләштереү; стилистик ресурстарҙы һәм төп әҙәби тел нормаларын күҙәтергә өйрәнеү; анализлау, сағыштырыу, классификациялау һәм тел факттарын баһалау һәләттәрен үҫтереү; яҙма һәм һөйләү телмәрен, телмәр эшмәкәрлеге төрҙәрен, аралашыуҙың төрлө ситуацияларында телде ҡулланыу ҡағиҙәләрен, телмәр этикет нормаларын үҙләштереү; актив һәм потенциаль һүҙлек запасын байытыу; телмәрҙә грамматик сараларҙы ҡулланыу күләмен киңәйтеү; алынған белемде, күнекмәне аралашыу процесында, уҡыу эшмәкәрлегендә һәм көндәлек тормошта ҡулланыу һәләтлеген камиллаштырыу.

Белем биреү ойошмаһының уҡыу планына ярашлы, башҡорт теле предметын өйрәнеүгә 5-9 кластарҙа аҙнаһына 2 сәғәт бүленә.Уҡыу курсына үҙгәрештәр сәғәт һандарына ғына индерелде.
Уҡыу-уҡытыу методик комплекттары:

Башҡорт теле: уҡытыу туған (башҡорт) телдә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 5-се класы өсөн уҡыу ҡулланмаһы. Авторҙары: Ю.В. Псәнчин, Ғәбитова З.М., Әюпов Р.Р., Мөхәмәтова Р.М. һ.б.Өфө: Китап, 2020.

Башҡорт теле: уҡытыу туған (башҡорт) телдә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 6-сы класы өсөн уҡыу ҡулланмаһы. Авторҙары: Х.В.Солтанбаева, Л.С.Балапанова. Өфө: Китап, 2020.

Башҡорт теле. Ябай һөйләм синтаксисы: уҡытыу туған (башҡорт) телдә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 7-се класы өсөн уҡыу ҡулланмаһы. Авторҙары: Ә.М.Аҙнабаев, С.А.Таһирова, М.Ә.Ғәзизуллина. Өфө: Китап, 2020.

Башҡорт теле. Ҡушма һөйләм синтаксисы: уҡытыу туған (башҡорт) телдә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 8-се класы өсөн уҡыу ҡулланмаһы. Авторҙары: Л.Х.Сәмситова, С.А.Таһирова, Э.Ф.Рәхимова, Т.М.Исламова. Өфө: Китап, 2020.

Башҡорт теле: уҡытыу туған (башҡорт) телдә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 9-сы класы өсөн уҡыу ҡулланмаһы. Авторҙары: В.Ш.Псәнчин, Ю.В.Псәнчин, А.И.Игелекова, Ф.Ю.Үтәбаева. Өфө: Китап, 2020.

## “Туған (башҡорт) тел” предметын өйрәнеү һөҙөмтәләре

“Туған (башҡорт) тел” программаһын үҙләштереүҙең **шәхси** һөҙөмтәләре булып түбәндәгеләр тора:

1) башҡорт телен башҡорт халҡының төп милли-мәҙәни ҡиммәте булараҡ аңлау, интеллектуаль, ижади һәләтлектәрен һәм шәхестең мораль-этик сифаттарын үҫтереүҙә туған телдең ролен, уның мәктәптә белем алыу процесындағы әһәмиәтен билдәләү;

2) башҡорт теленең эстетик ҡиммәтен аңлау; туған телгә ҡарата ихтирам, һөйөү, уның менән ғорурланыу тойғоһо тәрбиәләү; милли-мәҙәни сағылыш булараҡ, башҡорт теленең таҙалығын һаҡлау тураһында хәстәрлек күреү; үҙ телмәреңде камиллаштырыуға ынтылыу;

3) аралашыу процесында кәрәкле һүҙлек запасына эйә булыу һәм үҙ фекереңде иркен еткереү әсән тейешле грамматик сараларҙы үҙләштереү; үҙ телмәреңде күҙәтеү һәм уны баһалау күнекмәһен булдырыу.

“Туған (башҡорт) тел” программаһын үҙләштереүҙең **метапредмет һөҙөмтәләре:**

1) телмәр эшмәкәрлегенең бөтә төрҙәрен үҙләштереү:
-телдән һәм яҙма бирелгән мәғлүмәтте адекват ҡабул итеү;
-уҡыуҙың төрлө төрҙәрен үҙләштереү;

-төрлө сығанаҡтарҙан, шул иҫәптән ваҡытлы матбуғат сараларынан, уҡыу ҡулланмаһы булараҡ компакт-дискыларҙан, интернет ресурстарҙан мәғлүмәтте һайлап алыу һәләтлелеге;

-һайлап алыу алымдары менән эш итә белеү һәм тәғәйен темаға материалды системаға килтереү; уҡыу йә аудирование һөҙөмтәһендә, шулай уҡ техник саралар һәм мәғлүмәти технологиялар ярҙамында мәғлүмәтте үҙ аллы эҙләй ала белеү, уны анализлау һәм һайлап алыу; ҡайтанан эшкәртеү, һаҡлай һәм еткерә белеү;

-алдағы уҡыу эшмәкәрлегенең (индивидуаль һәм коллектив) маҡсатын билдәләү һәләтлелеге, эштең эҙмә-эҙлелеге, өлгәшелгән һөҙөмтәләрҙе баһалау, уларҙы телдән һәм яҙма формала адекват аныҡ итеп әйтеү;

-телдән һәм яҙма формала үҙ фекереңде иркен еткерә белеү; тыңланған йәки уҡылған тексты тәҡдим ителгән кимлдә (план, һөйләү, конспект, аннотация) һөйләй алыу;

- үҙ тиңдәштәрең аудиторияһында ҙур булмаған доклад, хәбәрҙәр менән сығыш яһай белеү;

2) алынған белем һәм күнекмәләрҙе көндәлек тормошта ҡуллана белеү; туған телде башҡа төрлө фәндәрҙән белем алыу сығанағы булараҡ файҙаланыу; тел күренештәрен анализлау буйынса алған белем һәм күнекмәләрен предмет-ара (сит тел, әҙәбиәт һ. б. дәрестәрҙә) ҡулланыу;

3) аралашыу процесында тирә-яҡтағы кешеләр менән коммуникатив маҡсатлы бәйләнештә, ниндәйҙер эш төрөн бергә башҡарыу, бәхәс, фекер алышыуҙа ҡатнашыу; формаль һәм формаль булмаған шәхестәр менән мәҙәни-ара аралашыу барышындағы төрлө ситуацияларҙа телмәр этикетының милли-мәҙәни нормаларын үҙләштереү.

**Предмет һөҙөмтәләре:**

1) башҡорт теленең башҡорт халҡының милли теле, Башҡортостан Республикаһының дәүләт теле булыуы тураһында, тел һәм халыҡ мәҙәниәтенең бәйләнештәре тураһында, туған телдең кеше һәм йәмғиәт тормошондағы роле тураһында ҡараш булдырыу;

2) шәхестең интеллектуаль һәм ижади һәләтен үҫтереүҙә, белем алыуҙа, шулай уҡ үҙ-үҙеңде камиллаштырыу процесында башҡорт теленең билдәле ролен аңлау;

3) телмәр эшмәкәрлегенең бөтә төрҙәрен үҙләштереү:

Аудирование (тыңлау) һәм уҡыу:

-телдән һәм яҙма бирелгән мәғлүмәтте (маҡсат, тексттың темаһы, төп һәм өҫтәмә мәғлүмәт) адекват ҡабул итеү;

-төрлөсә уҡыу күнекмәләрен булдырыу (эҙләнеү, ҡарап сығыу, танышыу, өйрәнеү); төрлө стилдәге, жанрҙағы текстарҙы үҙләштереү;

-уҡылған текстағы (план, тезис) мәғлүмәтте ҡайтанан эшкәртеү күнекмәләрен; төрлө стилдәге, жанрҙағы текстарҙы үҙләштереү;

-төрлө типтағы һүҙлектәр, белешмә өсөн әҙәбиәт, шулай уҡ электрон ҡулланмалар менән иркен ҡулланыу;

-төрлө стилдәге һәм жанрҙағы текстарҙы телдән адекват ҡабул итеү; аудированиеның (аудиотексты тулыһынса аңлау, уның төп йөкмәткеһен аңлау, мәғлүмәтте һайлап алыу) төрлө төрҙәрен үҙләштереү;

-стилистик үҙенсәлектәрен иҫәпкә алып, йөкмәткенән һәм ҡулланылған тел сараларынан сығып, фекерҙе сағыштыра алыу;

һөйләү һәм яҙыу:

-тыңланған һәм уҡылған тексты телдән һәм яҙма формала тәҡдим ителгән кимәлдә (йөкмәткеһен һөйләү, план, конспект) һөйләй алыу;

-телдән һәм яҙма формала үҙ фекереңде дөрөҫ һәм иркен еткерә алыу, тексты логик яҡтан эҙмә-эҙлекле төҙөү нормаларын һаҡлау; факттарға һәм үҙеңде уратып алған ысынбарлыҡ күренештәренә, уҡыған һәм ишеткәндәргә үҙ мөнәсәбәтеңде адекват сағылдырыу;

-төрлө телмәр стилендә һәм төрлә жанрҙарҙа (аралашыу ситуацияһына ҡарап) телдән һәм яҙма текст төҙөй белеү; төрлө телмәр стилендә һәм төрлө жанрҙарҙа (хикәйә, хат, ғариза, баһалама, ышаныс ҡағыҙы, расписка) яҙа белеү, аралашыу бурыстарынан сығып, тел һүрәтләү сараларын ирекле рәүештә һайлау;

-төрлө төрҙәге монолог һәм диалогты үҙләштереү; ҙур булмаған хәбәрҙәр, докладтар менән үҙ тиҫтерҙәрең алдында сығыш яһау;

-ғәмәлдә төрлө телмәрҙәге аралашыуҙың орфоэпик, лексик, грамматик, хәҙерге башҡорт теленең стилистик нормаларын һәм әҙма телмәрҙә төп орфографик һәм пунктуационнормаларҙы һаҡлау; лексика һәм фразеологияны стилистик яҡтан корректлы ҡулланыу; яҙыуҙа орфография, пунктуацияның төп ҡағиҙәләрен һаҡлау;

-телмәр этикеты нормаларын һаҡлап аралаша алыу, аралашыуҙың төрлө тормош ситуацияларында ым-ишара, мимиканы урынлы ҡулланыу;

-уҡыу процесында һәм көндәлек аралашыуҙа үҙ телмәреңде контролдә тота алыу; йөкмәткенән, һүҙҙәрҙе урынлы ҡулланыуҙан сығып, үҙ телмәреңде баһалай белеү; грамматика һәм телмәр хаталарын таба, уларҙы төҙәтә алыу; үҙ тексыңды мөхәррирләү һәм камиллаштыра белеү;

4) туған тел тураһында төп фәнни нигеҙҙе үҙләштереү; уның кимәл һәм берәмектәр бәйләнешен аңлау;

5) тел ғилеменең төп аңлатмалары: лингвистиканың һәм уның төп бүлектәре: тел һәм телмәр, телмәр аралашыуы, һөйләү һәм яҙма телмәр, монолог, диалог һәм уларҙың төрҙәре; аралашыу ситуациялары, фәнни, публицистик, рәсми йәки эш ҡағыҙҙары стилдәре, матур әҙәбиәт теле; функциональ-мәғәнәүи телмәр төрҙәре (хикәйәләү, һүрәтләү, фекер йөрөтөү); текст төрҙәре; телдең төп берәмектәре, уларҙың билдәләре һәм телмәрҙә ҡулланыу үҙенсәлектәрен үҙләштереү;

6) һүҙгә төрлө анализ төрҙәрен (фонетик, морфематик, һүҙьяһалыш, лексик, морфологик), һөйләм һәм һүҙбәйләнешкә синтаксик анализ: йөкмәтке, төп билдә һәм структура, тел һүрәтләү сараларын ҡулланыуҙы иҫәпкә алып, тексты анализлау;

7) туған телдең эстетик функцияһын таныу, матур әҙәбиәт текстарын анализлағанда телмәрҙең эстетик кимәлен баһалау.

## Уҡытыу предметының төп йөкмәткеһе
## 5 класс

***Тел - аралашыуҙың иң мөһим сараһы (1с.)*** Туған телебеҙ – башҡорт теле. Уның төрки телдәре ғаиләһенә ҡарауы.

***Башланғыс кластарҙа үтелгәндәрҙе ҡабатлау (2с.)*** Һүҙҙең морфологик киҫәктәре: тамыр һәм ялғауҙар. Ҡалын һәм нәҙек ялғауҙар. Исемдәрҙең һан, килеш менән үҙгәреше, күплек һәм килеш ялғауҙарының дөрөҫ яҙылышы. Яңғыҙлыҡ исемдәрҙең дөрөҫ яҙылышы. Сифат. Сифаттарҙың дәрәжәләре. Цифр менән бирелгән һандарҙа, даталарҙа ялғауҙарҙың дөрөҫ яҙылышы. Ҡылымдарҙың заман, һан, зат һәм барлыҡ-юҡлыҡ менән үҙгәреше.

***Синтаксис һәм пунктуация. Телмәр мәҙәниәте (14с.)*** Синтаксис һәм тыныш билдәләре (пунктуация) тураһында төшөнсә. Һүҙбәйләнеш, һүҙбәйләнештә эйәртеүсе һәм эйәреүсе һүҙҙәр. Интонацияға, һөйләү маҡсатына һәм хис-тойғо биҙәгенә ҡарап, һөйләмдәрҙең бүленеүе: хәбәр, һорау, өндәү, бойороҡ һөйләмдәр. Уларҙың интонацион үҙенсәлектәре. Пунктограмма, һөйләмдәрҙән һуң тыныш билдәләренең ҡуйылышы. Һөйләмдең баш киҫәктәре: эйә, хәбәр;

һөйләмдәрҙең эйәрсән киҫәктәре; аныҡлаусы, тултырыусы, хәлдәр. Йыйнаҡ һәм тарҡау һөйләмдәр. Тиң киҫәкле һөйләмдәр. Теркәүесһеҙ һәм теркәүесле тиң киҫәктәр араһында тыныш билдәләре. Тиң киҫәктәр араһындағы ә, ләкин, һәм, шулай уҡ кеүек теркәүестәрҙең янында тыныш билдәләре. Өндәш һүҙҙәр, улар эргәһендә тыныш билдәләре. Ҡушма һөйләм тураһында төшөнсә (һәр ябай һөйләмдә эйәһе лә, хәбәре лә булған ҡушма һөйләмдәр менән эш итеҙ), араһында һәм, ә, ләкин, йә, йәки, әгәр, шуның өсөн, шуға күрә, сөнки теркәүестәре алдында өтөр ҡуйып яҙыу. Тура телмәрле һөйләмдәрҙә тыныш билдәләренең ҡуйылышы. Диалог. Диалог алдында һыҙыҡ. Текст тураһында төшөнсә, уның өлөштәре, һөйләмдәрҙең үҙ-ара бәйләнеше. Ҡыҙыл юл.

***Фонетика һәм графика. Орфография. Телмәр мәҙәниәте (12с.)*** Фонетика тураһында төшөнсә. Телмәр өндәре. Телмәр ағзалары. Өндәрҙең яһалышы, һуҙынҡылар һәм тартынҡылар. Ҡалын һәм нәҙек һуҙынҡылар. А, о, ы, э һуҙынҡыларының ике төрлө әйтелеше. Яңғырау һәм һаңғырау тартынҡылар. Рус теленән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙәге ҡаты һәм йомшаҡ тартынҡылар – һүҙҙәрҙең мәғәнәһен айырыусы өндәр, һүҙ башында һәм аҙағында айырым фонетик шарттарҙа [ҡ],[ к] өндәренең [ғ], [г] өндәренә үҙгәреү осраҡтары, һуҙынҡылар араһында[б], [п] өндәренең әйтелеүе. Өн һәм хәреф. Өндәрҙең яҙыуҙа хәрефтәр менән белдерелеүе. Алфвит. Орфография тураһында төшөнсә. Айырыу билдәләре: ь,ъ: уларҙың дөрөҫ ҡулланылышы. Йомшаҡлыҡ билдәһе – ь, уның дөрөҫ яҙылышы. О, а, ә, е, ё, ю, я, у, ү хәрефтәренең өн мәғәнәләре. Ижек. Ижектәрҙең төрҙәре, һүҙҙәрҙе юлдан юлға күсереү. Баҫым. Баҫымлы һәм баҫымһыҙ ижектәр. Баҫымдың һуңғы ижеккә, һүҙ уртаһындағы һәм тәүге ижеккә төшөү осраҡтары. Логик баҫым. Рус теленән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙәге баҫым.

***Лексика. Телмәр мәҙәниәте (5с.)*** Лексика тураһында дөйөм төшөнсә. Башҡорт теленең һүҙ байлығы. Һүҙҙең лексик мәғәнәһе. Һүҙҙәрҙең тура һәм күсмә мәғәнәлә ҡулланылыуы. Мәғәнәләре буйынса һүҙҙәрҙең тематик төркөмдәре. Башҡорт теленең аңлатмалы һүҙектәре. Синонимдар. Антонимдар. Омонимдар.

***Һүҙьяһалыш һәм орфография (7с.)*** Тамыр һәм суффикстар. Тамыр һәм һүҙҙең нигеҙе (яһалма һүҙ). Яһаусы һәм үҙгәртеүсе аффикстар (ялғауҙар). Һүҙҙәрҙә яһаусы һәм үҙгәртеүсе ялғауҙарҙың килеү тәртибе. Һүҙьяһалыш. Һүҙьяһалыш юлдары: һүҙгә ялғау ҡушыу юлы менән; һүҙҙәрҙе ҡушыу юлы менән; һүҙҙәрҙе парлау юлы менән; һүҙҙәрҙе бәйләү юлы менән; һүҙҙәрҙе ҡыҫҡартыу юлы менән. Ҡушма һүҙҙәрҙең дөрөҫ яҙылышы.

***Морфология. Орфография. Телмәр мәҙәниәте (7с.)*** Исемдең дөйөм мәғәнәһе, морфологик билдәләре (һан, эйәлек заты, килеш менән үҙгәреүе) һәм синтаксик вазифалары. Уртаҡлыҡ һәм яңғыҙлыҡ исемдәр. Яңғыҙлыҡ исемдәрҙең ҙур хәреф менән башлап яҙылыуы: географик атамалар, урам һәм майҙан исемдәре, тарихи ваҡиғалар, дәүләт байрамдары, китап, газета, журнал, картина, кинофильмдар, спектаклдәр, әҙәби һәм музыкаль әҫәрҙәр. Дәүләт һәм йәмәғәт учреждениелары исемдәренең дә ҙур хәреф менән башлап яҙылыуы. Исемдәрҙең төрлө юлдар менән: 1) һүҙгә ялғау ҡушыу, 2) һүҙҙәрҙе ҡушыу, 3) һүҙҙәрҙе парлау, 4) һүҙҙәрҙе бәйләү, 5) һүҙҙәрҙе ҡыҫҡартыу юлдары менән яһалыуы.

***Ҡылым (9с.)*** Ҡылымдың мәғәнәһе. Морфологик билдәләре (зат, һан менән үҙгәреүе, өс төрлө заманда, барлыҡта-юҡлыҡта ҡулланылыуы) синтаксик вазифалары. Үҙ аллы һәм ярҙамсы ҡылымдар. Үҙ аллы ҡылымдарҙың ярҙамсы ҡылым вазифаһындайөрөүе. Тамыр һәм яһалма ҡылымдар. Ҡылымдарҙың яһалыу юлдары: һүҙгә ялғау ҡушыу юлы менән; 2) ҡушма ҡылымдар. Ҡылымдың затлы формалары. Бйороҡ һөйкәлеше. Бойороҡ һөйкәлеше ҡылымдарының мәғәнәһе: һан, зат менән үҙгәреүе. Хәбәр һөйкәлеше: хәбәр һөйкәлеше ҡылымдарының мәғәнәһе, уларҙың үткән, хәҙерге, киләсәк замандарҙа килеүе. Хәбәр һөйкәлеше ҡылымдарының үткән, хәҙерге. Киләсәк заман формалары. Шарт һөйкәлеше: шарт һөйкәлеше ҡылымдарыныңмәғәнәһе һәм яһалышы. Уларҙың зат, һан, юҡлыҡ менән үҙгәреше. Теләк һөйкәлеше: теләк һөйкәлеше ҡылымдарының мәғәнәһе, уларҙың яһалышы һәм үҙгәреше.

***5-се класта үтелгәнде ҡабатлау һәм дөйөмләштереү(2с.)***

## 6 класс

***Туған тел – алтын асҡыс (1с.)***

***5-се класта үтелгәндәрҙе ҡабатлау (2с.)***

***Лексика (5с.)*** Килеп сығышы яғынан башҡорт теленең һүҙлек составы: төп башҡорт һүҙҙәре, рус, ғәрәп, фарсы телдәренән, рус теле аша башҡа телдәрҙән үҙләштерелгән һүҙҙәр. Башҡорт әҙәби теленең дөйөм ҡулланышлы һүҙҙәре.

Профессиональ һүҙҙәр.  Иҫкергән һүҙҙәр, яңы һүҙҙәр, диалект һүҙҙәре. Башҡорт теле һүҙлек составының үҙгәреп, байығып тороуы һәм уның юлдары. Фразеологик берәмектәр.

***Исем (10с.)*** Исем тураһында үтелгәндәрҙе ҡабатлау. Исемдәрҙең һан менән үҙгәреше. Исемдең ялғауһыҙ ҙа күплек мәғәнәһен белдереүе. Исемдәрҙең эйәлек заты менән үҙгәреше. Исемдәрҙең килеш менән үҙгәреше. Килештәрҙең мәғәнәләре, һорауҙары, ялғауҙары. Эйәлек ялғаулы исемдәрҙең килеш менән үҙгәреше. Исемдәрҙең хәбәрлек категориялары.

***Сифат(6с.)*** Сифаттың мәғәнәһе, морфологик билдәләре, синтаксик вазифаһы. Сифаттарҙың яһалыу юлдары – ҡушыу, һүҙҙәрҙе парлау, һүҙҙәрҙе бәйләү. Төп һәм шартлы сифаттар. Сифат дәрәжәләре: төп дәрәжә, сағыштырыу дәрәжәһе, артыҡлыҡ дәрәжәһе, аҙһытыу дәрәжәһе. Сифаттарҙың исемләшеү осраҡтары, ул саҡта уларҙың һан, килеш, эйәлек заты менән үҙгәреүе, хәбәрлек формаһын ҡабул итә алыуы. Сифаттарҙың дөрөҫ яҙылышы.

***Һан (4с.)*** Һандың мәғәнәһе, морфологик билдәләре, һөйләмдәге вазифалары. Ябай һәм ҡушма һандар: уларҙың дөрөҫ яҙылышы. Цифрҙар менән бирелгән һандарҙың һәм уларҙың ялғауҙарының дөрөҫ яҙылышы.

***Алмаш (5с.)*** Алмаш тураһында төшөнсә. Алмаш төркөмсәләре. Алмаштарҙың килеш менән үҙгәреше.Алмаштың телмәрҙә үтәгән вазифаһы, мәғәнә үҙенсәлектәре,грамматик билдәләре. Билдәһеҙлек һәм юҡлыҡ алмаштарының яһалышы. Алмаштарҙың үҙгәреше.

***Ҡылым (12с.)*** Ҡылымдың морфологик билдәһе, синтаксик функцияһы. Ҡылым төркөмсәләре: исем ҡылым, уртаҡ ҡылым, сифат ҡылым, хәл ҡылым. Ҡылым йүнәлештәре: төп йүнәлеш, ҡайтым йүнәлеше, төшөм йүнәлеше, уртаҡлыҡ йүнәлеше, йөкмәтеү йүнәлеше. Ҡылым күләмдәре. Ҡылым рәүешлеге. Ҡушма ҡылым.

***Рәүеш (5с.)*** Рәүеш тураһында төшөнсә: белдергән мәғәнәһе, морфологик билдәләре. Рәүеш төркөмсәләре: төп рәүеш, ваҡыт рәүеш, урын рәүеш, оҡшатыу рәүештәре, күләм-дәрәжә рәүештәре. Рәүештең сифат менән оҡшаш һәм айырмалы яҡтары. Рәүеш дәрәжәләре. Рәүештәрҙең яһалышы. Тамыр һәм яһалма рәүештәр. Ҡушма рәүеш. Рәүештәрҙең дөрөҫ яҙылышы.

***Теркәүестәр (2с.)*** Теркәүестәр һәм уларҙың телмәрҙәге функцияһы. Теркәүестәрҙең бүленеше: теҙеү теркәүестәре, эйәртеү теркәүестәре.

***Бәйләүестәр (1с.)*** Бәйләүестәрҙең телмәрҙәге вазифаһы.Уларҙың бүленеше: 1) төп һәм эйәлек килеште талап итеүсе бәйләүестәр; 2) төп һәм төбәү килеште талап итеүсе бәйләүестәр; 3) сығанаҡ килеште һорап тороусы бәйләүестәр.

***Киҫәксәләр (2с.)*** Киҫәксәләрҙең морфологик билдәләре, телмәрҙәге вазифалары. Мәғәнәләренә ҡарап, киҫәксәләрҙең бүленеше.

***Мөнәсәбәт һүҙҙәр (1с.)*** Мөнәсәбәт һүҙҙәр тураһында төшөнсә. Мөнәсәбәт һүҙҙәрҙең синтаксик роле. Кәрәк, тейеш, мөмкин, бар, юҡ, түгел, буғай, ярай мөнәсәбәт һүҙҙәренең мәғәнәһе һәм телмәрҙә ҡулланылышлы, уларҙың исем урынында килә алыуы.

***Ымлыҡтар (1с.)*** Ымлыҡтар тураһында төшөнсә, уларҙың морфологик һыҙаттары, телмәрҙәге вазифалары. Ымлыҡтарҙың төрҙәре.

***Оҡшатыу һүҙҙәре (1с.)*** Оҡшатыу һүҙҙәре тураһында дөйөм төшөнсә.

## 7 класс

***Башҡорт теле – беҙҙең туған телебеҙ (1с.)***

***Үтелгәндәрҙе ҡабатлау (2с.)***

***Синтаксис (10с.)*** Синтаксистың төп маҡсаты. Синтаксистың берәмеге булараҡ һүҙбәйләнеш һәм һөйләм. Һүҙбәйләнештең төп билдәләре. Һүҙбәйләнештәрҙең яһалыу юлдары. Эйәртеүле бәйләнеш төрҙәре: ярашыу, башҡарылыу, йәнәшәлек, һөйкәлеү. Һүҙбәйләнеш һәм ҡушма һүҙ. Нығынған һүҙбәйләнештәр.

***Ябай һөйләм (13с.)*** Һөйләмдең грамматик нигеҙе. Эйә менән хәбәр. Эйә менән хәбәр араһында һыҙыҡ. Ябай һөйләмдең синтаксик структураһы. Һөйләмдең эйәрсән киҫәктәре. Аныҡлаусы. Тиң һәм тиң булмаған аныҡлаусылар. Өҫтәлмәлек. Тултырыусы. Тура һәм ситләтелгән тултырыусы. Хәлдәр. Рәүеш хәлдәре. Күләм- дәрәжә хәлдәре. Урын хәлдәре. Ваҡыт хәлдәре. Шарт хәлдәре. Сәбәп хәлдәре. Маҡсат хәлдәре. Кире хәлдәр. Һөйләмдә һөйләм киҫәктәренең урынлашыу тәртибе. Һөйләмдең эйәрсән киҫәктәрен сағылдырыу ысулдары.

***Ике һәм бер составлы һөйләмдәр (12с.)*** Ике составлы һөйләмдәр. Бер составлы һөйләмдәр. Бер составлы һөйләмдәрҙең төрҙәре. Билдәле эйәле һөйләм. Билдәһеҙ эйәле һөйләм. Эйәһеҙ һөйләм. Атама һөйләмдәр. Уларҙың структур һәм мәғәнәүи үҙенсәлектәре.Тулы һәм кәм һөйләмдәр. Тиң киҫәкле һөйләмдәр. Тиң киҫәктәрҙең булыу шарттары. Тиң киҫәктәрҙең бәйләнеү юлдары. Тиң киҫәкле һөйләмдәрҙең интонацион һәм пунктуацион үҙенсәлектәре. Тиң киҫәктәр эргәһендә дөйөмләштереүсе һүҙҙәр. Тиң һәм тиң булмаған аныҡлаусылар. Тиң киҫәкле һөйләмдәрҙең стилистик мөмкинлектәре.

***Һөйләм киҫәктәре менән грамматик бәйләнеше булмаған һүҙҙәр (5с.)*** Өндәш һүҙҙәр, уларҙың функцияһы. Өндәш һүҙҙәр эргәһендә тыныш билдәләре. Өндәш һүҙле һөйләмдәрҙең интонацияһы. Инеш һүҙ һәм инеш һөйләмдәр. Мәғәнәһе яғынан инеш һүҙ һәм инеш һөйләмдәр. Һөйләмдәрҙе һәм текстың мәғәнәүи өлөштәрен бәйләүсе сара булараҡ инеш һүҙ һәм инеш һөйләмдәрҙе ҡулланыу.

***Һөйләмдең айырымланған эйәрсән киҫәктәре (6с.)*** Айырымланыу тураһында төшөнсә. Айырымланыуҙың асылы һәм шарттары. Айырымланған киҫәкле һөйләмдәрҙең мәғәнәүи, интонацион һәм пунктуацион үҙенсәлектәре. Өҫтәлмәлектәрҙең айырымланыуы. Аныҡланыусыларҙың айырымланыуы тураһында. Хәл әйтемдәре һәм уларҙың үҙенсәлеге. Хәл әйтемдәренең айырымланыуы, ҡулланыу үҙенсәлектәре.

***Тура һәм ситләтелгән телмәр. Диалог. Цитаталар (4с.)*** Икенсе кешенең телмәрен еткереү юлдары: тура һәм ситләтелгән телмәр. Тура һәм ситләтелгән телмәрле һөйләмдәрҙең синонимияһы. Уларҙа тыныш билдәләре. Диалог. Диалог аҙағында тыныш билдәләре.Цитаталар. Телмәргә цитаталар индереү ысулдары. Цитата ҡулланғанда тура телмәрле һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре.

***Йыл буйына үтелгәндәрҙе ҡабатлау –дөйөмләштереү(3с.)***

**8 класс**

***Синтаксис буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау (4с.)***

***Ҡушма һөйләм (2с.)*** Ҡушма һөйләмдәр. Ҡушма һөйләмдәр өлөштәренең мәғәнәүи, структур һәм интонацион берҙәмлеге.

***Теҙмә ҡушма һөйләмдәр(7с.)***

1.Теркәүесһеҙ теҙмә ҡушма һөйләмдәр тураһында дөйөм төшөнсә, уларҙа тыныш билдәләре.теркәүесһеҙ теҙмә ҡушма һөйләмдәрҙең өлөштәре араһында мәғәнәүи мөнәсәбәт, был мөнәсәбәттәрҙең интонацион һәм пунктуацион сағылдырылышы. Теркәүесле теҙмә ҡушма һөйләмдәр тураһында дөйөм төшөнсә, уларҙа тыныш билдәләре. Теркәүесле теҙмә ҡушма һөйләмдәрҙә ҡулланылған теркәүестәр: йыйыу, ҡаршы ҡуйыу, бүлеү-ҡабатлау, һығымта яһау, аныҡлау теркәүестәре һәм мөнәсәбәт һүҙҙәр.

2.Теркәүесле һәм теркәүесһеҙ теҙмә ҡушма һөйләмдәрҙе дөрөҫ интонация менән уҡыу, уларҙы һөйләү һәм яҙма телмәрҙә ҡулланыу күнекмәләрен үҫтереү, ул төр ҡушма һөйләмдәргә синтаксик төпсөү яһай белеү.

***Эйәртеүле ҡушма һөйләмдәр (21с.)***

1. Эйәртеүле ҡушма һөйләм, уның төҙөлөшө. Баш һәм эйәрсән һөйләмдәр. Эйәрсән һөйләмдәрҙең баш һөйләмгә бәйләнеп килеү саралары: 1)теркәүестәр, 2)бәйләүестәр, 3)килеш ялғауҙары, 4)интонация, 5)мөнәсәбәт һүҙҙәр.

Баш һәм эйәрсән һөйләмдәрҙең араһындағы мәғәнәүи бәйләнеш, структур, синтаксик бәйләнеш саралары характеры буйынса эйәртеүле ҡушма һөйләм төрҙәре. Эйәртеүле ҡушма һөйләм классификацияһы. Эйәрсән һөйләмдәрҙең төрҙәре, улар эргәһендә тыныш билдәләре: эйә, хәбәр, аныҡлаусы, тултырыусы эйәрсән һөйләмдәр. Хәл һөйләмдәр: ваҡыт, урын, рәүеш, күләм-дәрәжә, маҡсат, сәбәп, шарт һәм кире эйәрсән һөйләмдәр.

2. Һөйләм киҫәктәрен, айырымланған эйәрсән киҫәктәрҙе, хәл әйтемдәрен эйәрсән һөйләмдәрҙе, теркәүесһеҙ һәм теркәүесле ҡушма һөйләмдәрҙе дөрөҫ интонация менән уҡыу, уларҙы телмәрҙә стилистик маҡсатта ҡулланыу күнекмәләре.Ҡушма һөйләмдәргә телдән һәм яҙып синтаксик һәм пунктуацион төпсөү күнекмәһен үҫтереү.

***Ҡатмарлы синтаксик конструкциялар (10с.)***

1. Ҡатмарлы синтаксик конструкциялар. Ҡатмарлы синтаксик конструкциялар рәтенә ингән һөйләмдәр. Күп эйәрсәнле ҡушма һөйләмдәр тураһында дөйөм төшөнсә. Күп эйәрсәнле ҡушма һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре. Ҡатнаш ҡушма һөйләмдәр тураһында дөйөм төшөнсә.Ҡатнаш ҡушма һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре. Теҙем тураһында дөйөм төшөнсә. Уларҙың стилистик роле.

2.Ҡатмарлы синтаксик төҙөлмәләрҙе дөрөҫ интонация менән уҡыу күнекмәһе, шул уҡ тип һөйләмдәрҙе һөйләү һәм яҙма телмәрҙә ҡулланыу күнекмәһен үҫтереү.

***Тыныш билдәләре (6с.)*** Һөйләм аҙағындағы тыныш билдәләре. Өтөрҙөң ҡуйылыу осраҡтары. Нөктәле өтөр. Һыҙыҡ. Ике нөктә.

***5-8 класта үтелгәндәрҙе ҡабатлау (4с.)***

## 9 класс

***Инеш. Тел тураһында дөйөм төшөнсә (4с.)*** Йәмғиәт тормошонда телдең роле. Башҡорт теле – башҡорт халҡының милли теле һәм Башҡортостан Республикаһының дәүләт теле. Уның башҡа телдәр араһындағы урыны. Башҡорт теленең төрки телдәр төркөмөнә ҡарауы һәм ҡәрҙәш телдәр.

***1 бүлек (3с.)*** Әҙәби тел һәм диалект тураһында төшөнсә. Башҡорт теленең диалекттары. Башҡорт теле һәм һөйләштәренең ҡайһы бер үҙенсәлектәре. Ике теллелек.

***2 бүлек (5с.)*** Башҡорт әҙәби теленең стилдәре. Стилистика тураһында төшөнсә. Хәҙерге башҡорт теленең стилдәре: фәнни, публицистик, рәсми йәки эш ҡағыҙҙары, матур әҙәбиәт теле Уларҙың төп үҙенсәлектәре.

***3 бүлек (4с.)*** Һүрәтләү саралары тураһында төшөнсә. Эпитет. Сағыштырыу. Метафора. Синонимдар һәм уларҙы телмәрҙә ҡулланыу. Грамматик синонимдар, уларҙы телмәрҙә ҡулланыу. Антонимдар. Омонимдар. Тасуирлауҙа антитезаны файҙаланыу. Һүҙҙе һәм уның формаларын телмәрҙә дөрөҫ ҡулланыу.

***5-9 класта үтелгәндәрҙе ҡабатлау-йомғаҡлау (9с.)*** Фонетика. Орфоэпия. Орфография. Лексика. Башҡорт теленең һүҙлектәре. Һүҙъяһалыш. Морфология. Синтаксис һәм пунктуация. Ябай һөйләм. Ябай һөйләм төрҙәре. Ҡушма

һөйләмдәр. Теҙмә ҡушма һөйләм. Эйәртеүле ҡушма һөйләмдәр. Эйәрсән һөйләм төрҙәре. Ҡатмарлы ҡушма һөйләмдәр. Күп эйәрсәнле ҡушма һөйләмдәр. Теҙемдәр. Ҡатнаш ҡушма һөйләм.

**Тематик планлаштырыу**
**5 класс**

| № | Темалар | Сәғәттәр һаны | Үтәлеү ваҡыты | | Иҫкәрмә |
|---|---|---|---|---|---|
| | | | План буй-са | Фактик дата | |
| 1 | Тел – аралашыуҙың мөһим сараһы | 1 | 01.09 | | |
| 2 | Һүҙ киҫәктәре: тамыр һәм ялғауҙар | 1 | 04.09 | | |
| 3 | Үтелгәндәрҙе ҡабатлау.Исем,сифат,ҡылым. | 1 | 08.09 | | |
| 4 | Аңлатмалы диктант. “Көҙ килде” | 1 | 11.09 | | |
| 5 | Һүҙбәйләнеш. | 1 | 15.09 | | |
| 6 | Һөйләм. | 1 | 18.09 | | |
| 7 | Хәбәр, һорау, өндәү һөйләмдәр. | 1 | 22.09 | | |
| 8 | Һөйләмдең баш киҫәктәре. | 1 | 25.09 | | |
| 9 | Һөйләмдең эйәрсән киҫәктәре. Аныҡлаусы. | 1 | 29.09 | | |
| 10 | Тултырыусы. | 1 | 02.10 | | |
| 11 | Хәлдәр. | 1 | 06.10 | | |
| 12 | Һөйләмдең тиң киҫәктәре. | 1 | 09.10 | | |
| 13 | Т/ү. Э.Сәйетов. “Бесәндән ҡайтҡанда”. | 1 | 13.10 | | |
| 14 | Текст. | 1 | 16.10 | | |
| 15 | Өндәш һүҙ. Ябай һөйләмдәрҙе тикшереү тәртибе. | 1 | 20.10 | | |
| 16 | Аңлатмалы диктант. “Батырҙың исеме” | 1 | 23.10 | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| 17 | Ҡушма һөйләм. | 1 | 27.10 | | |
| 18 | Тура телмәр. Диалог. | 1 | 10.11 | | |
| 19 | Тура телмәрҙең дөрөҫ яҙылышы. | 1 | 13.11 | | |
| 20 | Синтаксис буйынса үтелгәнде ҡабатлау | 1 | 17.11 | | |
| 21 | Т.ү.Изложениеға әҙерлек. | 1 | 20.11 | | |
| 22 | Т.ү.План буйынса изложение яҙыу | 1 | 24.11 | | |
| 23 | Фонетика һәм графика. | 1 | 27.11 | | |
| 24 | Һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәр. | 1 | 01.12 | | |
| 25 | Алфавит. Өн һәм хәреф. | 1 | 04.12 | | |
| 26 | Һуҙынҡыларҙың дөрөҫ яҙылышы. | 1 | 08.12 | | |
| 27 | Ижек. Уларҙың төрҙәре. | 1 | 11.12 | | |
| 28 | Баҫым. | 1 | 15.12 | | |
| 29 | Һуҙынҡыларҙың һәм тартынҡыларҙың дөрөҫ әйтелеше | 1 | 18.12 | | |
| 30 | Өндәрҙең оҡшашыуы. | 1 | 22.12 | | |
| 31 | Контроль диктант. «Ҡара айғыр» | 1 | 25.12 | | |
| 32 | Хаталар өҫтөндә эш.Бүлек буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау | 1 | 29.12 | | |
| 33 | Лексика тураһында төшөнсә.Һүҙҙең мәғәнәһе. | 1 | 12.01 | | |
| 34 | Һүҙҙең күп мәғәнәлелеге. | 1 | 15.01 | | |
| 35 | Һүҙҙәрҙең күсмә мәғәнәһе. | 1 | 19.01 | | |
| 36 | Синонимдар. Антонимдар. | 1 | 22.01 | | |
| 37 | Тамыр һәм ялғауҙар. | 1 | 26.01 | | |
| 38 | Ялғауҙарҙың төрҙәре. | 1 | 29.01 | | |
| 39 | Тамыр һәм яһалма һүҙ. | 1 | 02.02 | | |
| 40 | Ялғауҙарҙың дөрөҫ яҙылышы. | 1 | 05.02 | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| 41 | Һүҙьяһалыш. Һүҙҙәрҙең яһалыу юлдары. | 1 | 09.02 | | |
| 42 | Ҡушма һүҙҙәр.Уларҙың дөрөҫ яҙылышы | 1 | 12.02 | | |
| 43 | Т.ү.Инша. «Ҡышҡы тәбиғәт» | 1 | 16.02 | | |
| 44 | Үҙ аллы һәм ярҙамсы һүҙҙәр. Һүҙ төркөмдәре. | 1 | 19.02 | | |
| 45 | Исем.Уртаҡлыҡ һәм яңғыҙлыҡ исемдәр. | 1 | 23.02 | | |
| 46 | Исемдәрҙең яһалышы.Ялғауҙар ҡушыу юлы менән исем яһалыу | 1 | 26.02 | | |
| 47 | Һүҙҙәрҙе ҡушыу юлы менән исем яһалыу. | 1 | 01.03 | | |
| 48 | Һүҙҙәрҙе парлау юлы менән исем яһау. | 1 | 04.03 | | |
| 49 | Һүҙҙәрҙе бәйләү һәм ҡыҫҡартыу юлы менән исем яһалыу. | 1 | 11.03 | | |
| 50 | Бүлек буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау | 1 | 15.03 | | |
| 51 | Контроль диктант «Тәбиғәт ҡосағында» | 1 | 18.03 | | |
| 52 | Ҡылым. | 1 | 22.03 | | |
| 53 | Ҡылымдың заман, зат һәм һан менән үҙгәреше | 1 | 01.04 | | |
| 54 | Үҙ аллы һәм ярҙамсы ҡылымдар. | 1 | 05.04 | | |
| 55 | Т.ү.М.Нестеровтың «Яҙ»картинаһы буйынса инша яҙыу | 1 | 08.04 | | |
| 56 | Тамыр һәм нигеҙ ҡылымдар | 1 | 12.04 | | |
| 57 | Ҡылымдарҙың яһалышы. | 1 | 15.04 | | |
| 58 | Ҡылымдарҙың затлы | 1 | 19.04 | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | формалары.Бойороҡ һөйкәлеше | | | | |
| 59 | Бойороҡ һөйкәлеше ҡылымының зат, һан һәм барлыҡ – юҡлыҡ менән үҙгәреше | 1 | 22.04 | | |
| 60 | Хәбәр һөйкәлеше. | 1 | 26.04 | | |
| 61 | Хәбәр һөйкәлеше ҡылымының заман менән үҙгәреше | 1 | 29.04 | | |
| 62 | Хәбәр һөйкәлеше ҡылымдарының үткән заманы. | 1 | 03.05 | | |
| 63 | Хәбәр һөйкәлеше ҡылымдарының хәҙерге заманы | 1 | 06.05 | | |
| 64 | Хәбәр һөйкәлеше ҡылымдарының киләсәк заманы | 1 | 10.05 | | |
| 65 | Шарт һөйкәлеше | 1 | 13.05 | | |
| 66 | Теләк һөйкәлеше. | 1 | 17.05 | | |
| 67 | Контроль диктант “Кемдәр шатлана?” | 1 | 20.05 | | |
| 68 | Хаталар өҫтөндә эш. | 1 | 24.05 | | |

**7 класс**

| № | **Дәрестең темаһы** | **Сәғ һаны** | **Үткәреү ваҡыты** | | **Иҫкәрмә** |
|---|---|---|---|---|---|
| | | | План. буй-са | фактик | |
| 1. | **Инеш.** Тел –аралашыу һәм көрәш ҡоралы | 1 | 01.09 | | |
| 2. | Фонетика, орфография, орфоэпия буйынса ҡабатлау | 1 | 04.09 | | |
| 3 | Морфология һәм лексика. | 1 | 08.09 | | |
| 4 | Диктант «Нефть» | 1 | 11.09 | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| 5 | **Синтаксис. Һүҙбәйләнеш.** Синтаксис һәм пунктуация. | 1 | 15.09 | | |
| 6 | Һүҙбәйләнеш һәм һөйләм. | 1 | 18.09 | | |
| 7 | Һүҙбәйләнештәрҙең яһалыу юлдары. | 1 | 22.09 | | |
| 8 | Эйәртеүле бәйләнештең төрҙәре. | 1 | 25.09 | | |
| 9 | Ярашыу. | 1 | 29.09 | | |
| 10 | Башҡарылыу. | 1 | 02.10 | | |
| 11 | Йәнәшәлек. | 1 | 06.10 | | |
| 12 | Һөйкәлеү | 1 | 09.10 | | |
| 13 | Ә.Ситдыҡованың «Башҡорт балы» картинаһы буйынса инша яҙыу | 1 | 13.10 | | |
| 14 | Һүҙбәйләнеш һәм ҡушма һүҙ. | 1 | 16.10 | | |
| 15 | Нығынған һүҙбәйләнештәр | 1 | 20.10 | | |
| 16 | «Һүҙбәйләнеш һәм һөйләм»проекттарын эшләү һәм яҡлау | 1 | 23.10 | | |
| 17 | Ябай һөйләм.Һөйләмдең баш киҫәктәре.Эйә,хәбәр | 1 | 27.10 | | |
| 18 | Эйә менән хәбәр araһында һыҙыҡ | 1 | 10.11 | | |
| 19 | Һөйләмдең эйәрсән киҫәктәре.Аныҡлаусы | 1 | 13.11 | | |
| 20 | Тиң һәм тиң булмаған аныҡлаусылар | 1 | 17.11 | | |
| 21 | Өҫтәлмәлек | 1 | 20.11 | | |
| 22 | Тултырыусы | 1 | 24.11 | | |
| 23 | Тура һәм ситләтелгән тултырыусылар. | 1 | 27.11 | | |
| 24 | Т.ү.Изложение | 1 | 01.12 | | |
| 25 | Хәлдәр.Рәүеш хәлдәре.Күләм-дәрәжә хәлдәре | 1 | 04.12 | | |
| 26 | Ваҡыт хәлдәре.Урын хәлдәре | 1 | 08.12 | | |
| 27 | Шарт хәлдәре | 1 | 11.12 | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| 28 | Сәбәп хәлдәре.Маҡсат хәлдәре | 1 | 15.12 | | |
| 29 | Кире хәлдәр | 1 | 18.12 | | |
| 30 | Контроль эш дәресе | 1 | 22.12 | | |
| 31 | Һөйләмдә һөйләм киҫәктәренең урынлашыу тәртибе | 1 | 25.12 | | |
| 32 | «Уңышлы кеше» проектын яҡлау | 1 | 29.12 | | |
| 33 | Ике һәм бер составлы һөйләмдәр | 1 | 12.01 | | |
| 34 | Ике составлы йыйнаҡ һәм тарҡау һөйләмдәр | 1 | 15.01 | | |
| 35 | Бер составлы һөйләмдәрҙең төрҙәре. Билдәле эйәле һөйләм. | 1 | 19.01 | | |
| 36 | Билдәһеҙ эйәле һөйләм. | 1 | 22.01 | | |
| 37 | Эйәһеҙ һөйләм. | 1 | 26.01 | | |
| 38 | Атама һөйләм. | 1 | 29.01 | | |
| 39 | Ике һәм бер составлы һөйләмдәр.Ҡабатлау һәм йомғаҡлау. | 1 | 02.02 | | |
| 40 | Т.ү.Ә.Лотфуллиндың Алтын көҙ» картинаһы буйынса инша яҙыу | 1 | 05.02 | | |
| 41 | Хаталар өҫтөндә эш. Үтелгәнде ҡабатлау, йомғаҡлау. Тест. | 1 | 09.02 | | |
| 42 | Тулы һәм кәм һөйләмдәр | 1 | 12.02 | | |
| 43 | Тиң киҫәкле һөйләмдәр | 1 | 16.02 | | |
| 44 | Тиң киҫәктәр эргәһендә тыныш билдәләре. | 1 | 19.02 | | |
| 45 | Тиң киҫәктәр эргәһендә Дөйөмләштереүсе һүҙҙәр | 1 | 23.02 | | |
| 46 | Бәйләнешле телмәр үҫтереү.Изложение яҙыу | 1 | 26.02 | | |
| 47 | Хаталар өҫтөндә эш. | 1 | 01.03 | | |
| 48 | Һөйләм киҫәктәре менән грамматик бәйләнеше булмаған һүҙҙәр.Өндәш һүҙҙәр | 1 | 04.03 | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| 49 | Өндәш һүҙҙәр эргәһендә тыныш билдәләре | 1 | 08.03 | | |
| 50 | Инеш һүҙ һәм инеш һөйләмдәр. | 1 | 11.03 | | |
| 51 | Инеш һүҙ һәм инеш һөйләмдәр эргәһендә тыныш билдәләре | 1 | 15.03 | | |
| 52 | Аңлатмалы диктант. “Таныш моң”. | 1 | 18.03 | | |
| 53 | Хаталар өҫтөндә эш.” Өндәш һәм инеш һүҙҙәр”темаһына проект эше | 1 | 22.03 | | |
| 54 | **Айырымланған эйәрсән киҫәктәр**. Айырымланыу тураһында төшөнсә. | 1 | 01.04 | | |
| 55 | Өҫтәлмәлектәрҙең айырымланыуы | 1 | 05.04 | | |
| 56 | Аныҡлаусыларҙың айырымланыуы тураһында | 1 | 08.04 | | |
| 57 | Хәл әйтемлдәре һәм уларҙың үҙенсәлектәре | 1 | 12.04 | | |
| 58 | Хәл әйтемдәренең айырымланыуы | 1 | 15.04 | | |
| 59 | Хәл әйтемдәренең айырымланыуы | 1 | 19.04 | | |
| 60 | Контроль диктант. Яралы һалдат шатлығы | 1 | 22.04 | | |
| 61 | Тура һәм ситләтелгән телмәр. | 1 | 26.04 | | |
| 62 | Тура телмәрле һөйләмдәр.Уларҙа тыныш билдәләре | 1 | 29.05 | | |
| 63 | Р.Нурмөхәмәтовтың “Батыр тураһында легенда. Тыуған ауылда”картинаһы буйынса инша яҙыу | 1 | 03.05 | | |
| 64 | Диалог | 1 | 06.05 | | |
| 65 | Цитаталар. | 1 | 13.05 | | |
| 66 | Т.ү.Изложение яҙыуға әҙерлек. | 1 | 17.05 | | |
| 67 | Изложение. “Вәли менән Ғәли” | 1 | 20.05 | | |
| 68 | Хаталар өҫтөндә эш. Үтелгәндәрҙе йомғаҡлау. | 1 | 24.05 | | |

## 8 класс

| № | Темалар | Сәғ. һаны | Үтәлеү ваҡыты | | Иҫкәрмә |
|---|---|---|---|---|---|
| | | | План буй-са | Фактик | |
| 1 | Синтаксис буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау. V – VII синыфтарҙа үтелгән тыныш билдәләре ҡуйылышын ҡабатлау. | 1 | 04.09 | | |
| 2 | Тиң киҫәктәр, айырымланған эйәрсән киҫәктәр, өндәш һүҙҙәр эргәһендә, тура телмәрҙә, эйә менән хәбәр араһында тыныш билдәләре ҡуйылышын ҡабатлау. | 1 | 07.09 | | |
| 3 | Инеш һүҙҙәрҙе, хәл әйтемдәрен ҡабатлау. | 1 | 11.09 | | |
| 4 | Айырымланған эйәрсән киҫәктәр һәм тура телмәр эргәһендә тыныш билдәләренең ҡуйылышын ҡабатлау. | 1 | 14.09 | | |
| 5 | Биремле диктант «Һай, донъяһы!» | 1 | 18.09 | | |
| 6 | Ҡушма һөйләм тураһында дөйөм төшөнсә. | 1 | 21.09 | | |
| 7 | Теҙмә һәм эйәртеүле ҡушма һөйләмдәр тураһында дөйөм төшөнсә. | 1 | 25.09 | | |
| 8 | Теҙмә ҡушма һөйләмдәр. | 1 | 28.09 | | |
| 9 | Теркәүесһеҙ теҙмә ҡушма һөйләмдәр. | 1 | 02.10 | | |
| 10 | Теркәүесһеҙ теҙмә ҡушма һөйләмдәрҙә тыныш билдәләренең ҡуйылышы. | 1 | 05.09 | | |
| 11 | Теркәүесле теҙмә ҡушма һөйләмдәр. | 1 | 09.10 | | |
| 12 | Теркәүесле  теҙмә ҡушма һөйләмдәрҙә тыныш билдәләренең ҡуйылышы. | 1 | 12.10 | | |
| 13 | Өйрәтеү изложениеһы. | 1 | 16.10 | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| 14 | Теҙмә ҡушма һөйләмдәр темаһын ҡабатлау. | 1 | 19.10 | | |
| 15 | Теҙмә ҡушма һөйләм темаһы буйынса проект төҙөү һәм яҡлау. | 1 | 23.10 | | |
| 16 | Контроль  диктант “Бәхетле ҡартлыҡ”. | 1 | 26.10 | | |
| 17 | Эйәртеүле ҡушма һөйләмдәр. | 1 | 09.11 | | |
| 18 | Баш һәм эйәрсән һөйләмдәр. | 1 | 13.11 | | |
| 19 | Эйәрсән һөйләмдең  баш һөйләмгә бәйләнеү саралары. | 1 | 16.11 | | |
| 20 | Эйәрсән һөйләмдең  баш һөйләмгә бәйләнеү саралары һәм уларҙа тыныш билдәләренең ҡуйылышы. | 1 | 20.11 | | |
| 21 | **Т.ү.** Инша. “Ҡышҡы юл-үҙе бер тамаша”. | 1 | 23.11 | | |
| 22 | Эйәрсән һөйләм төрҙәре.<br>Эйә һөйләм. | 1 | 27.11 | | |
| 23 | Эйәрсән хәбәр һөйләм. | 1 | 30.11 | | |
| 24 | Аныҡлаусы һөйләм. | 1 | 04.12 | | |
| 25 | Тултырыусы һөйләм. | 1 | 07.12 | | |
| 26 | Хәл һөйләмдәр<br>Ваҡыт һөйләм. | 1 | 11.12 | | |
| 27 | Урын һөйләм. | 1 | 14.12 | | |
| 28 | Рәүеш һөйләм. | 1 | 18.12 | | |
| 29 | Күләм-дәрәжә һөйләм. | 1 | 21.12 | | |
| 30 | Сәбәп һөйләм. | 1 | 25.12 | | |
| 31 | Маҡсат һөйләм. | 1 | 28.12 | | |
| 32 | Контроль диктант яҙыу. | 1 | 11.01 | | |
| 33 | Шарт һөйләм. | 1 | 15.12 | | |
| 34 | Сағыштырыу һөйләм. | 1 | 18.01 | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| 35 | Кире һөйләм. | 1 | 22.01 | | |
| 36 | Эйәрсән һөйләм төрҙәрен ҡабатлау. | 1 | 25.01 | | |
| 37 | Эйәрсән һөйләм төрҙәрен ҡабатлау. | 1 | 29.01 | | |
| 38 | Эйәрсән һөйләм төрҙәрен ҡабатлау. | 1 | 01.02 | | |
| 39 | Эйәрсән һөйләм төрҙәре буйынса зачет. | 1 | 05.02 | | |
| 40 | **Т.ү.**Ә.Лотфуллиндың «Башҡорт ҡатын-ҡыҙы портреты» картинаһы буйынса инша яҙыу | 1 | 08.02 | | |
| 41 | **«**Эйәрсән һөйләм төрҙәре»проекттарын эшләү һәм яҡлау. | 1 | 12.02 | | |
| 42 | Күп эйәрсәнле ҡушма һөйләмдәр **.** | 1 | 15.02 | | |
| 43 | Күп эйәрсәнле ҡушма һөйләмдәр. | 1 | 19.02 | | |
| 44 | Күп эйәрсәнле ҡушма һөйләмдәрҙә тыныш билдәләренең ҡуйылышы. | 1 | 22.02 | | |
| 45 | **Аңлатмалы диктант.** | 1 | 26.02 | | |
| 46 | Хаталар өҫтөндә эш. | 1 | 29.02 | | |
| 47 | Ҡатнаш ҡушма һөйләмдәр. | 1 | 04.03 | | |
| 48 | Ҡатнаш ҡушма һөйләмдәр. | 1 | 07.03 | | |
| 49 | Ҡатнаш ҡушма һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре. | 1 | 11.03 | | |
| 50 | **Т.ү.** Р.Әхмәтшиндең «Яҙ» картинаһы буйынса инша. | 1 | 14.03 | | |
| 51 | Теҙемдәр. | 1 | 18.03 | | |
| 52 | Теҙемдәр. | 1 | 21.03 | | |
| 53 | Йомғаҡлау дәресе.Зачет. | 1 | 01.04 | | |
| 54 | Ҡатмарлы синтаксик конструкцияларҙы ҡабатлау. | 1 | 04.04 | | |
| 55 | Ҡатмарлы синтаксик конструкцияларҙы ҡабатлау. | 1 | 08.04 | | |
| 56 | Тыныш билдәләре.Һөйләм аҙағындағы итыныш билдәләре. | 1 | 11.04 | | |
| 57 | Өтөрҙөң ҡуйылыу осраҡтары. | 1 | 15.04 | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| 58 | Өтөрҙөң ҡуйылыу осраҡтары. | 1 | 18.04 | | |
| 59 | Нөктәле өтөр. | 1 | 22.04 | | |
| 60 | Һыҙыҡ. | 1 | 25.04 | | |
| 61 | Ике нөктә . | 1 | 29.04 | | |
| 62 | Ике нөктә. | 1 | 02.05 | | |
| 63 | **Т.ү.**Фекерләү иншаһы яҙыу. | 1 | 06.05 | | |
| 64 | **Т.ү.**Фекерләү иншаһы яҙыу. | 1 | 09.05 | | |
| 65 | 5-8-се кластарҙа үтелгәндәрҙе ҡабатлау. | 1 | 13.05 | | |
| 66 | 5-8-се кластарҙа үтелгәндәрҙе ҡабатлау. | 1 | 16.05 | | |
| 67 | Контроль диктант. | 1 | 20.05 | | |
| 68 | Йомғаҡлау. Хаталар өҫтөндә эш. | 1 | 23.05 | | |

**9 класс**

| № | Темалар | Сәғ. һаны | Үтк.ваҡыты | | Иҫкәрмә |
|---|---|---|---|---|---|
| | | | План буй-са | Фактик | |
| 1 | Тел тура3ында т0ш0нс2. | 1 | 01.09 | | |
| 2 | Тел- 192 барыусы ижтима4и к1ренеш. | 1 | 06.09 | | |
| 3 | Баш7орт теле - баш7орт хал7ыны8 милли теле. | 1 | 08.09 | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| 4 | Башҡорт теленең баш7а 72р62ш телд2р ара3ында урыны. | 1 | 13.09 | | |
| 5 | Ә62би тел 32м диалект. | 1 | 15.09 | | |
| 6 | Баш7орт телене8 диалекттары. | 1 | 20.09 | | |
| 7 | Баш7орт 262би теле 32м уны8 19еше. | 1 | 22.09 | | |
| 8 | Ике теллелек. | 1 | 27.09 | | |
| 9 | Диктант. «Тәрән тамырҙар» | 1 | 29.09 | | |
| 10 | **Т.1.** Инша«Й2нт0й2к г1з2ллеген 3а7лайы7» . | 1 | 04.10 | | |
| 11 | **Т.1.** Инша«Й2нт0й2к г1з2ллеген 3а7лайы7». | 1 | 06.10 | | |
| 12 | Баш7орт 262би телене8 стилд2ре. Телм2р м262ни2те<br>Функциональ стилд2р. | 1 | 13.10 | | |
| 13 | Й2нле 30йл21 стиле. | 1 | 18.10 | | |
| 14 | Т.ү.Инша «Дарыу үләндәре йыйғанда» | 1 | 20.10 | | |
| 15 | Матур әҙәбиәт стиле | 1 | 25.10 | | |
| 16 | Матур әҙәбиәт стиленең телмәр саралары | 1 | 27.10 | | |
| 17 | Фәнни стиль. | 1 | 08.11 | | |
| 18 | Публицистик стиль | 1 | 10.11 | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| 19 | Милли матбуғатҡа күҙәтеү. | 1 | 15.11 | | |
| 20 | Рәсми эш ҡағыҙҙары стиле. | 1 | 17.11 | | |
| 21 | Рәсми эш ҡағыҙҙары стиле. | 1 | 22.11 | | |
| 22 | Хаттар стиле. | 1 | 24.11 | | |
| 23 | Функциональ стилдәрҙе йомғаҡлау. | 1 | 29.11 | | |
| 24 | Һүрәтләү саралары.Эпитет. | 1 | 01.12 | | |
| 25 | Сағыштырыу. | 1 | 06.12 | | |
| 26 | Метафора. | 1 | 08.12 | | |
| 27 | Т.ү.Инша.Һайланма темалар. | 1 | 13.12 | | |
| 28 | Контроль диктант «Төрлө дуҫтар була» | 1 | 15.12 | | |
| 29 | Хаталар өҫтөндә эш. | 1 | 20.12 | | |
| 30 | Синонимдар. | 1 | 22.12 | | |
| 31 | Грамматик синонимдар. | 1 | 27.12 | | |
| 32 | Тасуирлауҙа антитезаны файҙаланыу. | 1 | 29.12 | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| 33 | Һүҙҙе һәм уның формаларын телмәрҙә дөрөҫ ҡулланыу. | 1 | 10.01 | | |
| 34 | Т.ү.Изложение яҙыуға әҙерлек. | 1 | 12.01 | | |
| 35 | Т.ү.Изложение. «Ҡырын эш ҡырҡ йылдан һуң да беленә » | 1 | 17.01 | | |
| 36 | Фонетика. | 1 | 19.01 | | |
| 37 | Баҫым. | 1 | 24.01 | | |
| 38 | Орфоэпия. | 1 | 26.01 | | |
| 39 | Орфография. | 1 | 31.01 | | |
| 40 | Лексика. | 1 | 02.02 | | |
| 41 | Һүҙьяһалыш. | 1 | 07.02 | | |
| 42 | Исем. | 1 | 09.02 | | |
| 43 | Исемдәрҙең эйәлек һәм хәбәрлек категориялары. | 1 | 14.02 | | |
| 44 | Сифат. | 1 | 16.02 | | |
| 45 | Төп һәм шартлы сифаттар. | 1 | 28.02 | | |
| 46 | Һан. | 1 | 01.03 | | |
| 47 | Һан төркөмсәләре. | 1 | 06.03 | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| 48 | Алмаш. | 1 | 13.03 | | |
| 49 | Алмаш төркөмсәләре | 1 | 15.03 | | |
| 50 | !телгәндәр буйынса тест. | 1 | 20.03 | | |
| 51 | Т.ү.Изложение яҙыуға әҙерлек | 1 | 22.03 | | |
| 52 | Т.ү.Изложение. « Ҡыйғаҡ-ҡыйғаҡ ҡаҙ ҡысҡыра» | 1 | 03.04 | | |
| 53 | Ярҙамсы һүҙ төркөмдәре. | 1 | 05.04 | | |
| 54 | Диктант. «Йыр йөрәкле егет» | 1 | 10.04 | | |
| 55 | Синтаксис һәм пунктуация. | 1 | 12.04 | | |
| 56 | Синтаксис һәм пунктуация. | 1 | 17.04 | | |
| 57 | Синтаксис һәм пунктуация. | 1 | 19.04 | | |
| 58 | Ябай һөйләм. | 1 | 24.04 | | |
| 59 | Ябай һөйләм. | 1 | 26.04 | | |
| 60 | Ҡушма һөйләм. | 1 | 03.05 | | |
| 61 | Ҡушма һөйләм. | 1 | 08.05 | | |
| 62 | ?атнаш 7ушма 30йл2м. | 1 | 10.05 | | |
| 63 | Бөтә үтелгәндәр буйынса тест. | 1 | 15.05 | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| 64 | Т.ү.Изложение яҙыуға әҙерлек | 1 | 17.05 | | |
| 65 | Т.ү.Изложение. « Дан кәпәс түгел» | 1 | 22.05 | | |
| 66 | Контроль диктант. «Оҙон юл» | 1 | 24.05 | | |